**Мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн "Минең бәләкәй Ватаным" темаһына әхләки-патриотик тәрбиә буйынса дәрес конспекты**

**Программа йөкмәткеһе**: балаларға Ватан, тыуған яҡ төшөнсәләренә аңлатма биреү, Башҡортостандың картаһы һәм символикалары менән таныштырыу, бәләкәй Ватан тураһында төшөнсә биреү, бәйләнешле телмәрҙәрен үҫтереү, алынған тема буйынса һүҙлек запастарын байытыу, Тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү.

**Белем биреү өлкәһе интеграциялары:** ″Коммуникация", ″Танып белеү", ″Художестволы әҙәбиәт", "Музыка".

**Эш төрҙәре:** коммуникатив, әҙәби әҫәрҙе аңлау, музыкаль художестволы эшмәкәрлек.

**Планлаштырылған һөҙөмтәләр:** Рәсәй һәм Башҡортостан тураһында мәғлүмәт алыу, Башҡортостан символикаларын белеү, тәрбиәсенең һорауҙарына дөрөҫ яуап бирә алыу.

**Йыһазландырыу:** Рәсәйҙе күҙалларға ярҙам иткән иллюстрациялар, Башҡортостандағы ҡалалар, уның тарихи урындары, презентация, Башҡортостан гимны, "Минең Ватаным" йыры.

**Һүҙлек эше:** держава, Мәскәү, республика.

**Дәрес барышы**

1. **Ойоштороу моменты.**

"Минең Ватаным " йыры яңғырай.

Тәрбиәсе. Йырҙа нимә тураһында йырланыла? (балаларҙың яуаптары)

Тәрбиәсе. Бөгөн беҙ һеҙҙең менән беҙҙең Ватаныбыҙ тураһында һөйләшәсәкбеҙ.

2. **Төп өлөш.**

Ватан тураһында әңгәмә ҡороу.

Тәрбиәсе. Әйтегеҙ әле, балалар, нимә ул Ватан? (балаларҙың яуаптары)

Ватан - ул беҙҙең тыуған һәм йәшәгән еребеҙ. Ул беҙҙең киң иркен дала, матур йәшел урман, сылтырап аҡҡан йылғаларыбыҙ. Беҙ йәшәгән матур Алкино ауылы, беҙ йөрөгән балалар баҡсаһы, беҙҙең

атай-әсәй, өләсәй-олатайыбыҙ һәм башҡа туғандарыбыҙ йәшәгән ер. Ҡайҙа ғына йөрөмәһен, һәр кеше тыуған ерен һағынып ҡайта.

Тәрбиәсенең Ватан тураһында шиғыр уҡыуы.

Үҙ еремдә – үҙ йортобоҙ,
Мине һөйгән әсәм – атам.
Баҡса, мәктәп уҡытыусым,
Башҡортостан – һөйгән Ватан.
Тыуған яғым – алтын баҫыу,
Бейек тауҙар, ҡалын урман.
Тыуған илем- Башҡортостан,
Уның менән ғорурланам.
Кешеләре татыу, уңған.
Тыныс ҡына ата һәр таң.
Киләсәге яҡты, матур,
Башҡортостан – беҙҙең Ватан.

Слайд күрһәтеү.

- Ватан – ул беҙ йәшәгән ер.
- Нисек атала? Эйе Рәсәй!
- Әйтегеҙ, Рәсәй тураһында нимә беләһегеҙ? (балаларҙың яуаптары)
-Ватан -ул беҙ йәшәгән ер.
-Ул нисек атала?
- Һеҙ Рәсәй тураһында нимә беләһегеҙ? (балалар яуап бирә)
- Рәсәйҙең баш ҡалаһы Мәскәү.
- Унда күп милләтле халыҡ йәшәй. Ул тауҙарға, күлдәргә, ҡаҙылма байлыҡтарға бай ил.

...Беҙҙең Ватан, ҡыҙым, ошо
Һин баҫып торған урын,
Һәм һинең көн һайын иртән
Уйнарға сыҡҡан юлың.
Уй менән уйлап бөтмәҫлек
Бөйөк ул беҙҙең Ватан,
Хыялдар менән етмәҫлек
Бейек ул беҙҙең Ватан.
Аҡ болоттарға менһәң дә
Күренмәй уның сиге.

Бар донъяға нурын һибеп,
Яҡтыра уның бите.

Слайд күрһәтеү.

Тәрбиәсе. Балалар, Рәсәй - ул бөйөк держава. Уның эсенә бик күп республикалар, өлкәләр, ҡалалар инә.

Тәрбиәсе. Ә беҙ ниндәй республикала йәшәйбеҙ?

Слайд күрһәтеү. Башҡортостан картаһын ҡарау.

Беҙҙең республикабыҙ йылға-күлдәргә, тауҙарға бай ер! Өфө – баш ҡала.

Балалар, беҙҙең республикала бик күп милләттәр йәшәй (рустар, татарҙар, сыуаштар, марыйҙар һ.б.).

Башҡортостан – гөлбостан
Былбылыстан, нурбостан.
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт тигән арыҫлан.

**Физминутка**

(Башҡорт көйөнә тыпырлатып төрлө хәрәкәттәр яһап бейеп алыу.)

- Балалар, һеҙ беләһегеҙме, беҙҙең илдә республикаларҙың үҙҙәренең гербтары, флагтары һәм гимндары бар. Хатта һәр райондың да үҙ символдар бар. Әйҙәгеҙ беҙ һеҙҙең менән Башҡортостандың гербын ҡарап үтәйек

Слайд ҡарау.

Башҡортостан гербы уртаһында башҡорттарҙың данлыҡлы яугир улы Салауат Юлаев төшөрөлгән, шулай уҡ унда алтын һары төҫкә мансылып яңы таң атып килгәне һәм ҡурайҙың 7 тажы төшөрөлгән, ул 7 ырыуҙың үҙ-ара татыу булғандарын күрһәтә. Иң аҫтында Башҡортостан флагы төшөрөлгән.

Слайд ҡарау. Башҡортостан флагы.

Башҡортостаным флагы
Тора өс төрлө төҫтән.
Күк, аҡ,йәшел, ә уртаға
Ҡурай сәскәһе төшкән.

- Балалар ошо төҫтәр нимәне аңлата тип уйлайһығыҙ? (балаларҙың яуаптары)

  Йәшел төҫ – азатлыкты,
  аҡ төҫ – тыныслыҡты,
  зәңгәр төҫ – сафлыҡты белдерә.

Гимнды беҙ аяҡ үрә баҫып, ир-егеттәр башлыҡтарын сисеп тыңларға тейеш. (Гимн тыңлау.)

- Һәр кешенең үҙенең йәшәгән бәләкәй генә Ватаны бар. Әйтегеҙ әле, һеҙҙең бәләкәй Ватанығыҙ ҡайҙа?
- Әйе, дөрөҫ, ул - һеҙ йәшәгән район, ауыл, һеҙ йәшәгән йорт һәм һеҙҙең туғандарығыҙ.
- Беҙҙең район, ауыл нисек атала?
- Шишмә районы, "Алкино" шифаханаһы ауылы.

Туп менән уйын. "Беҙҙең ауыл ниндәй?"

Тәрбиәсе. Балалар, хәҙер мин һеҙгә ауыл тураһында һорау бирәм, һеҙ уға тулы яуаптар бирегеҙ.
- Беҙҙең ауыл ниндәй? (матур, төҙөк, таҙа)
- Һеҙ ауылды яратаһығыҙмы? (балаларҙың яуаптары)
- Һеҙ ауылығыҙ өсөн ниндәй эштәр башҡараһығыҙ? (балаларҙың яуаптары)

3. **Йомғаҡлау.**

Бына беҙҙең Ватан буйлап сәйәхәт аҙағына ла яҡынлашты. Һеҙ бөгөн Тыуған ил, тыуған ер, Ватанығыҙ тураһында бик күп мәғлүмәт алдығыҙ.Алла бирһә, һеҙ ҙә илебеҙгә кәрәкле ул-ҡыҙҙар булып үҫерһегеҙ тип ышанам.